**Аңлатма яҙыу.**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 9-сы класы өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән эш программаһы.

Эш программаһы 68 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).

**Төҙөүсеһе**:

**Дәреслек:** Башҡорт теле: Урыҫ мәктәптәренең 9 класында уҡыған башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге.– Өфө: Китап, 200

Төҙөүселәре: Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2005.

Программа кимәле: **базислы**

**Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:**

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Дәреслектәге, уҡыу ҡулланмаларындағы текстарҙы, башҡорт телендә сыға торған «Йәншишмә», «Аҡбуҙат», «Аманат», «Шоңҡар», «Йәшлек» гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен биреү.
4. Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
5. Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
6. Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**

1. «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн). Төҙөүселәре Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х., Дәүләтшина М.С.,Хөснөтдинова Ф.Ә, Хажин В.И. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.
2. Башҡорт теле: Урыҫ мәктәптәренең 9 синыфында уҡыған башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге. Өфө: Китап, 2001.
3. М.Ғ Усманова, З.М Ғәбитова. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-11 синыф уҡыусылары өсөн ҡулланма. Өфө, “Китап”, 2002.
4. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев: уҡытыусығы ярҙамға. Башҡортостан Республикаһы фәндәр акад. Рәсәй фәндәр акад. ТТӘИ «Эшлекле династия». Өфө, 2009 й.

5. Ринат Камал: уҡытыусыға ярҙамға. Башҡортостан Республикаһы фәндәр акад. Рәсәй фәндәр акад. ТТӘИ «Эшлекле династия». Өфө, 2009 й.
6. Раҡаева А.С., Дәүләтшина М.С. «Башҡорт теленән контроль һорауҙар». Өфө, Педкнига – 2008 й.
7. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Китап, 2003 й.
8. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. 3-сө баҫма. - Өфө: Китап, 2004й.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :**

1. Башҡорт теле: Урыҫ мәктәптәренең 9 синыфында уҡыған башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге.– Өфө: Китап, 2001
2. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
3. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х., Дәүләтшина М.С.,Хөснөтдинова Ф.Ә, Хажин В.И. – Ижевск: «КнигоГрад», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа 15 - се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль автоном дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

««Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;

Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы;

«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;

Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең эш программаларының төҙөлөшөн һәм уға талаптарҙы билдәләүсе локаль акты.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора: т**елмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу; телдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү; бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә**.**

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

1. Башҡорт телен башланғыс кластарҙа алған белем һәм күнекмәләрҙе талаптарға ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы, лексик байлығы, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.
2. Туған әҙәбиәт материалы еңелдән ауырға барыу принцибына ярашлы урынлаштырыла. Йөкмәткеһендә нигеҙҙә идея-тематик, тарихи-хронологик һәм жанр принцибы һаҡлана. Башҡортостандың мәҙәниәте, әҙәбиәте, сәнғәте өйрәнелә.
3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар – 8 сәғәт**

Һүҙлек менән эш. Эпоста күтәрелгән философик, педагогик һәм әхлаҡ-этик проблемалар. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә биреү, һөйләм төрҙәрен, тыныш билдәләрен үҙләштереү.

**Сәсәндәр ижады – 1 сәғәт**

Сәсәндәр ижады тураһында белешмә. Әҫәрҙәрҙең төп идеяһы, образдар системаһы, сағыштырмаса характеристика. Әйтеш тураһында төшөнсә.

**Шәжәрәләр – 2 сәғәт.**

Шәжәрә тураһында төшөнсә. Шәжәрәләрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Баш һәм эйәрсән һөйләм.

**Салауат Юлаев – 8 сәғәт.**

Яугир-шағирҙың тормошо һәм яҙмышы. Салауат – яугир, шағир, сәсән. Шиғырҙарының тематикаһы һәм проблематикаһы. Тыуған ил, тәбиғәт, мөхәббәт, азатлыҡ һәм батырлыҡ тураһындағы шиғырҙары. Тарихи шәхес, әҙәби герой, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр тураһында төшөнсә. Картиналар буйынса эш. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.

**Аҡмулла – 8 сәғәт.**

Биографик белешмә. Философик лирика. Тәбиғәт лирикаһы. Шиғыр-ҡобайырҙар. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.

**Өмөтбаев –3 сәғәт.**

М.Өмөтбаевтың ғилми-ағартыу, тарих, этнография, фольклор, тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре.

**Сафуан Яҡшығолов – 2 сәғәт.**

Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре.

**Мәжит Ғафури – 10 сәғәт.**

Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Әҫәрҙәрендә социаль тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте фашлау. Художество методы, художество образ тураһында төшөнсә. Рәшит Нурмөхәммәтовтың картинаһы буйынса эш. Һыҙыҡ, нөктәле өтөр, ике нөктәнең ҡуйылыу осраҡтары.

**Ш.Бабич – 5 сәғәт.**

Шағирҙәың тормош һәм ижад юлы тураһында белешмә. Башҡортостан, азатлыҡ өсөн көрәш, тәбиғәт, мөхәббәт темаһы. Йәйәләр һәм тырнаҡтар ҡуйылыу осраҡтары. Синтаксис һәм пунктуация буйынса үтелгәндәрҙе дөйөмләштереү һәм системаға һалыу.

**Уҡыусыларҙың  белем кимәленә талаптар**

1. Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен  һөйләп биреү.
   Художество әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.
2. Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға характеристика биреү.

- Тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙе тәржемә итә белеү, таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү.
- 12-14 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
- Эпик, лирик, лироэпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

3. Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү

- Уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.

4. Телмәр ағышында өндәрҙең үҙгәреүен айыра һәм аңлата белеү.

- Диалогтарҙа башҡа кешеләрҙең телмәрендәге орфоэпик хаталарҙы күҙәтә һәм төркөмләй белеү.
- Һүҙлектәр менән файҙалана белеү
- Диктант, изложение һәи иншалар яҙыу

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
   Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;

– һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
– тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

Диктант – 5
Изложение - 2
Инша - 2

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-
карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде…)

-һүҙлек диктанты;
-һөйләмдәр төҙөү;
-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы;

| Календарь-тематик план | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| № | Тема | Сәғ. | Бит. | Үткәрелеү ваҡыты | | Иҫкәрмә |
| | | | | План. | Үткәрел. | |
| **I сирек** | | | | | | |
| 1 | Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Исем, сифат, алмаш | 1 | 3 | | | |
| 2 | Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Һүҙбәйләнештәр | 1 | 5-6 | | | |
| 3 | Ябай һөйләм синтаксисы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Айырымланған эйәрсән киҫәктәр. | 1 | 7-8 | | | |
| ***Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар.*** | | | | | | |
| 4 | «Урал батыр» эпосы. | 1 | 92-130 | | | |
| 5 | Эпос тураһында төшөнсә. Эпостың идея тематик йөкмәткеһен, образдарын асыу. | 1 | 130-134 | | | |
| 6 | Ҡушма һөйләм һәм уның төрҙәре. Республикабыҙҙың тарихынан | 1 | 11-12 | | | |
| 7 | Теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. | 1 | 12-16 | | | |
| 8 | **Диктант** | 1 | | | | |
| 9 | Халыҡ ижады тураһында. Афористик жанр төрҙәре. | 1 | 134-136 | | | |
| 10 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙың төрҙәре. | 1 | 17-18 | | | |
| 11 | Боронғо әҙәби ҡомарҡылар. Ҡол Ғәли. Ҡисса-и Йософ. | 1 | 138-142 | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | ***Сәсәндәр ижады.*** | | | | | |
| 13 | Сәсәндәр ижады. Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағыш сәсәндең әйтешкәне. | | 146-151 | | | |
| | ***Шәжәрәләр.*** | | | | | |
| 14 | Шәжәрәләр. Юрматы ырыуы шәжәрәһе. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр, уларҙағы тыныш билдәләре. | 1 | 151-154 | | | |
| 15 | Милли колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш. «Батыршаның батшаға яҙған хаты». | 1 | 154-157 | | | |
| | ***Салават Юлаев.*** | | | | | |
| 16 | Салауат Юлаевтың тормошо, шиғырҙары. Эйә һөйләм. | 1 | 157-159 | | | |
| 17 | Эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар. Тыныш билдәләре. | 1 | 26-29 | | | |
| 18 | **Контроль диктант.** | 1 | | | | |
| 19 | **Хаталар өҫтөндә эш.*Кластан тыш уҡыу.*** | 1 | | | | |
| | II сирек | | | | | |
| 20 | Хәбәр эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләүсе саралары. | 1 | 34-35 | | | |
| 21 | Тарихи шәхес һәм әҙәби герой. Тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр. Аныҡлаусы эйәрсән һөйләм. | 1 | 172-173 | | | |
| 22 | Һөйләмдәргә синтаксик анализ яһау.Урыҫ ғалимдары һәм яҙыусылары ижадтарында Башҡортостан темаһы. | 1 | 173 | | | |
| 23 | Тултырыусы эйәрсән һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 1 | 39 | | | |
| 24 | Эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма | 1 | 40 | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | һөйләмдәр. Башҡорт фольклорын өйрәнеүселәр. | | | | | |
| 25 | ***Кластан тыш уҡыу.***Башҡорт фольклоры. | 1 | | | | |
| 26 | Хәл,  ваҡыт һөйләмдәр. | 1 | 41 | | | |
| 27 | Башҡортостан тураһында урыҫ яҙыусылары | 1 | 176-177 | | | |
| 28 | Ҡәҙим Аралбай«Каруанһарай». Урын һөйләмдә тыныш билдәләре. | 1 | 178 | | | |
| ***М. Аҡмулла.*** | | | | | | |
| 29 | Мифтахетдин Аҡмулла. Тормошо һәм ижады. | 1 | 179-180 | | | |
| 30 | Аҡмулланың мәғрифәтсеоек ҡараштары. | 1 | 180-182 | | | |
| 31 | М Аҡмулла . Атайға хат. | 1 | 182-183 | | | |
| 32 | **Контроль диктант.** | 1 | | | | |
| 33 | **Хаталар өҫтөндә эш.** М. Аҡмулла. Урыным – зиндан. | 1 | | | | |
| 34 | Рәүеш һөйләмдә тыныш билдәләре. | 1 | 45 | | | |
| 35 | Сәбәп һөйләмдә тыныш билдәләре. | 1 | 46 | | | |
| 36 | М .Акмулла .Нәсихәттәр. Маҡсат һөйләм. | 1 | 47 | | | |
| III сирек | | | | | | |
| 37 | Маҡсат һөйләмдә тыныш билдәләре Аҡмулланың шиғыр-ҡобайырҙары. Күләм-дәрәжә һөйләм. | 1 | 50 | | | |
| 38 | М.Аҡмулланың тәбиғәткә арналған шиғырҙары.Яҙ. Көҙ. Уяныу. | 1 | 190 | | | |
| 39 | Шарт һөйләмдәр. | 1 | 54 | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 40 | Аҡмулланың ҡараштары. Аҡмулла-мәғрифәтсе шағир.<br>Ҡ.Аралбай. Аҡмулла. | 1 | 192-194 | | | |
| 41 | **Телмәр үҫтереү. Изложение.** | 1 | | | | |
| | ***М. Өмөтбаев.*** | | | | | |
| 42 | Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тормош юлы һәи ижады, ғилми-ағартыу эшмәкәрлеге. | 1 | 194-197 | | | |
| 43 | Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың шиғырҙары. | 1 | 199-200 | | | |
| 44 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре. | 1 | 60-61 | | | |
| | ***Сафуан Яҡшыголов.*** | | | | | |
| 45 | Сафуан Яҡшығолов. Тормошо һәм ижады, мәҫәлдәре. | 1 | 203-305 | | | |
| 46 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре. | 1 | 63-64 | | | |
| | ***М. Ѓафури.*** | | | | | |
| 47 | Мәжит Ғафури. Тормошо һәм ижады. | 1 | 207-212 | | | |
| 48 | М.Ғафури шиғырҙары, мәҫәлдәре. | 1 | 210-218 | | | |
| 49 | **Телмәр үҫтереү. Инша** | 1 | | | | |
| 50 | **Хаталар өҫтөндә эш.** Теҙемдәрҙә тыныш билдәләре. | 1 | 64-65 | | | |
| 51 | Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Ҡушма һөйләм төрҙәре. Тыныш билдәләре. | 1 | 67 | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 52 | М.Ғафуриҙың Октябрь революцияһына тиклем ижады. | 1 | 222-248 | | | |
| 53 | М.Ғафури. Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын. | 1 | 224-231 | | | |
| 54 | **Контроль диктант.** | 1 | | | | |
| 55 | **Хаталар өҫтөндә эш. *Кластан тыш уҡыу.*** | 1 | | | | |
| **IV сирек** | | | | | | |
| 56 | М.Ғафуриҙың Октябрь революцияһынан һуңғы ижады. «Шағирҙың алтын приискаһында»повесы. | 1 | 249-287 | | | |
| 57 | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. | 1 | 72-73 | | | |
| 58 | Өтөрҙөң ҡуйылыу осраҡтары. **Тикшереү диктанты**. | 1 | 74 | | | |
| 59 | Тултырыусы эйәрсән һөйләмдәргә синтаксик анализ | | 75-76 | | | |
| 60 | Художество методы. Художестволы образ. | 1 | | | | |
| 61 | **Телмәр үҫтереү. Изложение.** | 1 | | | | |
| ***Ш. Бабич.*** | | | | | | |
| 62 | Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады. Романтик лирика | 1 | 290-293 | | | |
| 63 | Ш. Бабич ижадында тура һәм күсмә мәғәнәлә килгән һүҙбәйләнештәр. Ш.Бабич ижадында ҡурай образы. | 1 | 293-298 | | | |
| 64 | Ш.Бабич ижадында тормош-көнкүреш мотивтары. Тәбиғәт, мөхәббәт лирикаһы. Мәҫәлдәре, тәмҫилдәре һәм балладалары. | 1 | 304-306 | | | |
| 65 | Ш.Бабич ижадында тәбиғәт, мөхәббәт лирикаһы. Мәҫәлдәре, тәмҫилдәре һәм | 1 | 306-309 | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | балладалары. | | | | | |
| 66 | Морфология  һәм синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе дөйөмләштереү һәм ҡабатлау | 1 | | | | |
| 67 | **Контроль диктант.** | 1 | | | | |
| 68 | **Хаталар өҫтөндә эш.** Ш. Бабич ижадында Башҡортостан темаһы һәм халыҡ образы. | 1 | | | | |
| 69 | ***Кластан тыш уҡыу.*** | 1 | | | | |
| 70 | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | | | | |

**Материаль-техник ҡулланмалар**

- телевизор;
- видеомагнитофон;
- компьютер;
- фортепиано; баян; ҡубыҙ;
- DVD;
- мультимедиа проектор.

**Әҙәбиәт исемлеге**


1. Башҡорт теле: Урыҫ мәктәптәренең 9 синыфында уҡыған башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге.– Өфө: Китап, 2001
2. Ғәбитова З.М. Телмәр  үҫтереү дәрестәре.  – Өфө: Китап, 2009.
3. Башҡортса – русса  мәҡәлдәр  һәм  әйтемдәр  һүҙлеге. –  Өфө: Китап, 1994.
4. Әүбәкирова  З.Ф., Әүбәкирова  Х.Е.,  Дилмөхәмәтов М.И. Мин  башҡортса уҡыйым –  Өфө: Китап, 2007.
5. Башҡорт  теле  таблицаларҙа,  схемаларҙа  һәм  ҡағиҙәләрҙә.  Әүбәкирова  З.Ф.–  Өфө, 2006.
6. Тел  төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
7. Журналдар  «Башҡортостан  уҡытыусыһы»,  «Аҡбуҙат»,  «Аманат».
8. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр:  Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

9. **Башҡорт шиғриәте антологияһы. Тарих, тел һәм әҙәбиәте институты. Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар. Рауил Бикбаев. Өфө: Китап, 2001й.**
10. Әбсәләмов З.З. Башҡортса-русса грамматик-оргографик һүҙлек. Рус мәктәптәрендә уҡыған башҡорт балалары өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 1993й.
11. Хажин В.И. Башҡортса-русса һәм русса-башҡортса кеҫә һүҙлеге. Өфө: Китап, 2006 й.
12. Ғ.Ғ.Хөсәйенов һ.б. Башҡорт әҙәбиәте тарихы (6 томда). Өфө: Китап, 1990-1996й.
13. Шарапов И. Ә. Дәрестәрҙә әҙәбиәт теорияһын һәм тыуған яҡты өйрәнеү / Ишмөхәмәт Шарапов. – Өфө : Китап, 2008. – 96 б.
14. Усманова М.Ғ., Абдуллина Ф.Ф. Башҡорт теле. Мәктәп уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 2000й.
15. Күсәйев А.Н. Русса-башҡортса техника терминдары һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2003й.
16. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Китап, 2003 й.
17. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. 3-сө баҫма. - Өфө: Китап, 2004й.
18. Әхмәҙиев Р.Х. Драматургияла жанр формалары. Өфө: Китап, 2003 й.
19. Сәлимов Н.Р. Башҡорт әҙәби теленең публицистик стиле. Өфө: Китап, 2003 й.
20. Харисов Ә.И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы: XVIII-XIX быуаттар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965й.
21. Шәхиев Р.В. Әҙәбиәттә герой орбитаһы: әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялар, ижади портреттар. Өфө: Китап, 2010 й.
22. Әхтәмов М.Ә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. Өфө: Китап, 2008 й.
23. Шарапов И. Ә. Йырауҙар, сәсәндәр, мәғрифәтселәр. Өфө: Китап, 2007 й.

**Перечень образовательных Интернет- ресурсов**

1. Сайт, посвященный изучению башкирского языка - **http://tel.bashqort.com/home**
2. Электронный журнал учителей башкирского языка и литературы - **http://ostaz.ru/**
3. Башкирский языковой портал - **http://bashkort-tele.narod.ru/**
4. Башкирский форум - **http://www.bashforum.net/** **http://bashkort-tele.livejournal.com/**
5. **www.morb.ru** Официальный сайт Министерства образования Республики Башкортостан
6. **www.edu.ru** Федеральный портал "Российское образование"
7. **www.минобрнауки.рф**.минобрнауки.рф Министерство образования и науки РФ
   **http://www.pravitelstvorb.ru/** Официальный сайт Правительства Республики Башкортостан
8. **www.apkpro.ru** Академия повышения квалификации и профессиональной переподготовки работников образования
9. **www.ege.edu.ru** официальный информационный портал ЕГЭ
10. **www.zankov.ru** Образовательная система Л.В.Занкова
11. **kpolyakov.narod.ru** Методические материалы и программное обеспечениедля школьников и учителей

12. **window.edu.ru** информационная система "Единое окно доступа к образовательным ресурсам"
13. **school-collection.edu.ru** единая коллекция цифровых образовательных ресурсов
14. **fcior.edu.ru** федеральный центр информационно-образовательных ресурсов